*Лариса АБДУЛЛИНА*

# Ҡурай һәм Ҡурайсы дуэты

Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, ҡурайсы Роберт Юлдашевтың ижадын студент саҡтан уҡ күҙәтеп киләм. Бер ҡараһаң, әллә ни күп тә ваҡыт үтмәгән төҫлө — ун-ун биш йыл самаһы. Икенсе яҡтан, ижадта үҙеңде танытыр, күрһәтер өсөн ярайһы ғына ваҡыт уҙып киткән дә баһа! Ә Роберт, ысынлап та, һынатманы, киреһенсә, әленән-әле яңы сығыштары менән, ҡурайға, халҡыбыҙ моңона тоғролоғо менән күңелдәрҙе арбап ҡына ҡалманы, ә йәне теләп башҡарған шөғөлөн халыҡҡа яңыса асты.

Уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдарында ҡурай сәхнә түрҙәренә яңынан ҡайтып, байрам йәме була башлаған саҡтар. Тап шул йылдарҙа халыҡ иҫе китеп "Аманат" төркөмөндә уйнаусы Роберттың ҡурай моңон тыңланы. Әллә танһыҡ, әллә ғәзиз, әллә үҙ булғанға, әллә эске аңда ата-бабалар рухын уятҡанға — был моң нисектер арбағыс көскә эйә төҫлө ине.

Бер мәл исемдәре билдәле ҡурайсыларға эйәреп, башҡа йәштәр ҙә ҡулына ҡурай алды. Роберт тәү сығыштарынан уҡ тәрән, моңло итеп уйнап һоҡландырғас, бөтәһе лә шундай кимәлдә сығыш яһар кеүек ине. Әммә тап ошо мәлдә бер хәҡиҡәт асылғандай булды: ҡурайҙа моң сығарыу өсөн уны өрөү генә аҙ икән дә баһа! Тәү тапҡыр Роберттың сығышын ишеткәндән алып, әле йәштәр араһында ҡурайҙа уның кеүек башҡарыусыны ишетә алғаным юҡ.

Һәр ижади эштең асылына төшөнөргә теләгән кеүек, ҡурайсы серҙәренә лә юл эҙләп ҡараным. Сәхнәгә һәр ваҡыттағыса етеҙ, ышаныслы аҙымдар менән килеп сыҡҡан Роберттың моңдо тойоу һәләтен самалап, һис кенә лә ҡала егете тип уйламағайным. Әллә шуға күнеккәнбеҙ, әммә күптән билдәле "таланттар ауылда ғына тыуа" тигән ялған стереотип уны ла урап үтмәгән төҫлө ине. Тик уйлағандарҙы кире ҡағып, Роберт Өфө ҡалаһында тыуып үҫкән, ошонда белем алған, Өфө махсус музыка мәктәбен, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлаған булып сыҡты. Ауыл да йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Ҡурайсы егет бәләкәйҙән үк ауылға

*Роберт Юлдашев Николай Носков менән*



тартылып, шунда көтөү көтөп, атта сабышып, балыҡ ҡармаҡлап үҫә. Каникулдарының һәр береће Ғафури районының Баҡраҡ, Бәләкәй Үтәш яландарында, урмандарында үтә, сөнки, Роберт үҙе әйтеүенсә, ул пионер лагерҙары шарттарына ярап бармаған малай була. Кем белә, бәлки, тап ана шул мәлдәрҙә уның күңеленә моң инеп оялағандыр ҙа.

Роберттың нәҫелендә билдәле ҡурайсылар юҡ юҡлығын, әммә, мәҫәлән, әсәһе яҡлап Төхвәтулла Таһиров олатаһы йыр-моңға ғашиҡ кеше булған. Был хаҡта уның яҙмышынан бер хәтирәне иҫләүселәрҙең һөйләгәнен яҙып үтеү ҙә етер, моғайын. Мылтыҡ көбәгөн ҡурай итеп өрөп, көйҙәр сығарырға тырышҡан ғаилә башлығы патефон хаҡында ишетеп ҡала. Әммә уны нисек һатып алырға?! Ул оҙон-оҙаҡ уйлап тормай, тота ла, йортон һатып, патефонлы була. Эйе, йәш кәләше менән ул бер ҡышты мунса һымаҡ бәләкәй генә өйҙә ҡышлай, әммә уның ҡарауы, күҙ алдығыҙға килтерәһегеҙме — патефондан яңғыраған йыр-моң менән. Киләһе яҙҙа уҡ ул шул көйҙәр, тормошҡа ашҡан теләге йоғонтоһонда өр-яңы йорт һалып сыға!

Роберттың әсәһе Фәүзиә апай һөнәре буйынса — табип, атаһы Нәжип ағай — инженер-төҙөүсе. Атай кеше бәләкәйҙән йыр-моңдо ятаҡан. Ул хатта өйләнеү менән ғаиләһенең матди хәле ауыр булһа ла (сөнки икеһе лә студент), беренсе эш хаҡына баян һатып алған. Ата-әсәләрҙең хыялын балалар тормошҡа ашыра, тиҙәр. Ошо һүҙҙәр Роберт хаҡында ла әйтелгән төҫлө. Сөнки Нәжип ағай сәнғәт өлкәһендә эшләмәһә лә, ҡатыны менән улы өсөн ижади мөхит тыуҙырған. Уҙған быуаттың 80-се йылдарында Советтар Союзынан туристик төркөмдәр, сит илгә сығып, сепрәк-сапраҡ, кейем-һалым һатып алырға тырышһа, улар улдарына ҡиммәтле, бынамын тигән профессиональ музыка ҡоралы — кларнет һатып алып ҡайта. Сөнки йәш музыкант был ваҡытта Өфө дәүләт сәнғәт институты эргәһендәге урта махсус музыка мәктәбендә кларнет-ҡурай класында уҡыған була. Шуға ла Роберт атай-әсәһенә ижад менән шөғөлләнеү өсөн мөхит тыуҙырғандары, ҡыҙыҡһыныуҙарын хуплап үҫтергәндәре өсөн сикһеҙ рәхмәтле. Бер туған ҡустыһы Таһир ҙа теләгән һөнәренә эйә булып, бөгөн үҙ эше менән шөғөлләнә икән, бында ла яҡындарының ҡеүәтләүе, яуаплылыҡты тойоуы һиҙелә.

*Гарик Сукачев һәм Роберт Юлдашев*



Роберттың уңыштары былай башлана. Башта ул үҙе уҡыған мәктәптә, аҙаҡ уҡыу йорттарында, тора-бара ҡала, республика, халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнашып, еңеү артынан еңеү яулай: Ғата Сөләймәнов исемендәге профессиональ ҡурайсылар

конкурсында — Гран-при (1997 йыл), Йомабай Иҫәнбаев исемендәге республика конкурсында — Гран-при (1998 йыл), музыканттарҙың ТӨРКСОЙ эгидаһы аҫтында ойошторолған халыҡ-ара конкурсында — беренсе премия лауреаты (1998 йыл), В.Андреев исемендәге халыҡ милли музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙың Бөтә Рәсәй конкурсында — беренсе премияға (2002 йыл), Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге ҡурайсылар конкурсында Гран-приға (2003 йыл) лайыҡ була. Еңеүҙәре менән ата-әсәһенә генә түгел, ата-бабаларына ла бурыслы булыуын тойған ҡурайсы Төхвәтулла олатаһы йәйләгән ергә ҡайтып, Ҡөрьән уҡыта, әруахтар алдында баш эйә.

Бөгөн ул ҡурай моңон Рәсәй ҡалаларында ғына түгел, сит илдәрҙә лә йыш яңғырата. Новосибирск, Барнаул, Череповец, Дондағы Ростов һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында Николай Носков менән бергә сығыш яһай. Кем һуң ул Носков, тиеүселәргә аңлатып китәм. Ул — “Парк Горького” рок-ансамбле менән бергә совет заманынан уҡ сит илдәрҙә танылыу яулаған беренсе рок-музыкант. Үҙәк телевидение каналдары аша Николай Носковтың концерттары йыш күрһәтелә. Уларҙа хәҙер ҡурай моңо ла яңғырай. Бер ҡараһаң, ҡурай һәм рок үҙ-ара бөтөнләй ят кеүек. Әммә Носков ҡурайҙы тап рок-музыка ҡоралы тип иҫәпләй. “Ҡурайҙың, рок кеүек, үҙ овердрайвы бар. Үҙ ансамблем өсөн музыка ҡоралын донъяның ҡайһы мөйөшөнән генә эҙләмәнем?! Америка ла, Тибет та ҡалманы һәм уны тап ҡурай моңонда, Роберт башҡарыуында таптым”, — ти ул. Ошо мәлдә Роберттың үҙе студент саҡта күңелендә йөрөткән теләктәре хаҡында һөйләүе иҫкә төшә... Ә бит ҡасандыр үҙ ниәте менән Мәскәү йырсыларының береһенең концертына барып, ҡурай менән сығыш яһарға теләгән, һаҡсылары ҡамауында йөрөгән ул артист янына яҡын бара алмаһа ла, Роберт шул мәлдә бик күп музыканттар менән танышып, нишләп ҡурай үҙәк телевидение каналдарында, башҡа тарафтарҙа йышыраҡ яңғырамай икән, тип, теләгенә табан тәүге аҙым яһай. Йылдар үткәс, уның һәм рок-музыкант Носковтың ниәттәре бойомға ашып, ҡурай бөгөн Англия, Франция, Италия, Греция, Австрия, Голландия сәхнәләрен яулай. Роберттың уҡытыусыһы, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдинов Мәскәүҙә рус телле тамашасының ҡурайҙы алҡышҡа күмеп, тетрәнеп ҡабул иткәненең шаһиты булған. Ул: “Николай Носков — талантлы, исеме танылған йырсы ғына түгел, ә аҡыллы, нескә тойғоло ижадсы ла. Сөнки, беренсенән, ҡурайҙың энергетикаһы көслө. Бының менән Носков тамашасыны яулай, уға яҡыная. Икенсенән, Роберт ҡурайҙың бар нескәлектәрен тойоп, кәрәк урында музыка ҡоралының ғәйрәтен арттырып, кәрәк урында тауышын йомшартып уйнай”, — тине. Үҙе маһир ҡурайсы, ҡурайсыларҙың уҡытыусыһы булған кешенең һүҙе күптән уйлап йөрөгән фекерҙәремә ҡеүәт өҫтәне. Ҡурай, борондан билдәле булыуынса, бик ҙур энергетикаға эйә. Тәбиғәт ҡосағында Ер шарының ғына түгел, бар Йыһандың моңон, ауаздарын үҙенә туплап, йыйып үҫкән ҡыу ҡурай — үҙе үк тәбиғи моң, бөйөк көс, тәрән хис! Ҡурайсының ҡурайҙың тауышына килеп ҡушылған өҙләүенән тыуған вибрацияны, резонансты Носков овердрайв, тиһә, икенсе рок-музыкант Сукачев, ҡурай тауышында мәңгелек моңо яңғырай, тип баһалай. Әйткәндәй, әгәр Носковтың һуңғы дискындағы ун ике йырҙың уныһында ҡурай яңғыраһа, Сукачевтың — икеһендә. Был ике

музыкант та, Роберт кеүек үк, ҡурайға ихлас ғашиҡ, улар тәбиғи, илаһи мондо нескә тоя.

Роберт ҡурай серҙәренә өйрәткән уҡытыусыларына рәхмәтле. Улар — Әҙеһәм Исҡужин һәм Юлай Ғәйнетдинов. Тап ошо ҡурайсылар егеткә ҡурайҙа уйнарға ғына түгел, ҡурай фольклорын, ижад юлын боронғо ҡурай мәктәбенә таянып башларға өйрәткән. Бер ҡараһаң, ябай ғына кәңәштәр кеүек, әммә үҙ эшенең оҫтаһы булырға теләгән кеше өсөн — алтынға бәрәбәр. Шуға ла Роберт Хәмит Әхмәтов, Абдулла Хәлфетдинов, Ишҡәле, Сәйфулла, Ишмулла Дилмөхәмәтовтар башҡарыуында боронғо ҡурай мәктәбенең ауаздарын ишетеп, күңеле тойғанса, бар тәрәнлегендә ҡурай фольклоры нигеҙенә таяна. Мөхәммәт Түлебаев менән Азат Айытҡоловтың да уйнауын үҙ итә ул. Бөйөктәрҙең береһе, талант — ул туҡһан туғыҙ процент тырышлыҡ, ҡалғаны тәбиғәттән, тип әйткән. Әлбиттә, талантты процентларға һалып үлсәп булмай, әммә тәбиғәттән бирелгән һәләтен вайымһыҙлығы, йә булмаһа ялҡаулығы арҡаһында юғалтыусылар аҙмы ни?! Ә бына Роберт хаҡында һөйләгәндә, тап тәбиғәт биргән һәләтен ниндәйҙер тәрән тойғо менән яратып, уны һәр яҙ асылған бөрөләй яңынан тыуыуын һиҙәм. Нисектер уның ижадын күҙәтеп барыуы күңелле лә, ҡыҙыҡ та, фәһемле лә. Күңелле, сөнки, алда әйтелгәнсә, уйнауынан ниндәйҙер көс алаһың, рухланаһың, дәртләнәһең. Хатта ҡайһы берҙә Роберттың бер үк көйҙө төрлөсә, төрлө мотив, төрлө аһәң һалып уйнауы тойола. Был, күрәһең, уның тамашасыға еткерергә теләгән уйхисенә бәйле. Ул — профессионал. Ниндәй генә кәйефтә лә, ниндәй генә хәлдә лә яратҡан эшен еренә еткереп башҡара белә. Роберт нисектер ҡурай менән шундай уртаҡ тел тапҡан, хатта ҡурайҙа юғары башҡарыу оҫталығына эйә булған Ҡурайсы менән Ҡурайҙың дуэты төҫлө ҡабул ителә был сығыш. Ҡурайҙа тәрән йөкмәткеле, тамашасыны тетрәндерерлек итеп уйнар өсөн үҙеңдең дә рухи өлгөргән булыуың зарур. Был бер көндә, бары Хоҙай биргән һәләт менән генә ирешә торған нәмә түгел. Ҡурайсы исемен йөрөтөү өсөн ҡурайҙа көй сығара белеү генә аҙ шул. Эйе, бөгөн ҡурайсыларыбыҙ күбәйҙе, әммә һан артынан ҡыуып, сифат хаҡында ла онотоп ебәрергә ярамай. Фәһеме бына ҡайҙа! Ҡурай — ул музыка ҡоралы ғына түгел, ә башҡорт халҡының асылы, изге ҡомартҡы, ата-бабалар ауазы, быуындар бәйләнеше. Ҡурайсыла йән, аҡыл, рух саҡырыуы бергә бәйләнергә тейеш. Сөнки ҡурайсы — боронғо көйҙәрҙе, уларҙың тарихын белгән, ҡурайҙа оҫта уйнаған, юғары башҡарыу техникаһына эйә булған шәхес. Робертта ошо сифаттарҙың барыһы ла бар, минеңсә. Шуға ла ул сәхнәлә үҙен иркен, ышанысллы тота. Ҡурай менән серләшә, мөкиббән китеп уйнай, ғүмерҙә лә ҡурайҙы күрмәгән тамашасыла ҡурай моңона ҡарата һөйөү уята.

Ҡурайҙа уйнағанда Роберт үҙе нимәләр кисерәлер, уныһын ул әйтмәне (сөнки һәр кемдең башҡаларға әйтмәгән, серле, үҙе өсөн генә ҡәҙерле, мөҡәддәс хистәре була, тип иҫәпләй), әммә уның башҡарыуында ҡурай моңон тыңлап, ир-егеттәрҙең күҙҙәренә йәш тулыуына шаһит булғаным бар. Хәйер, күптәр үҙҙәре үк Роберттың уйнауын йөрәкһеп тыңлауын йәшермәҫ. Хатта бер мәл уны тыңлағандан һуң йәш башҡарыусыларҙы ғына түгел, өлкән ҡурайсыларҙы ла ҡабул итмәй башлағанымды хәтерләйем. Сөнки ялған ноталарҙы, тамашасыны алдаштырырға тырышыуҙы тояһың да, күңел ҡайта. Роберттағы ихласлыҡ, камил-

лыҡ, үҙе әйткәнсә, яратҡан эшен теләп башҡарыуы арбай. Шуға ул ҡайҙа ғына гастролгә, сығыш яһарға юлланһа ла, эс бошмай. Сөнки башҡорт халҡының милли асылына тиң музыка ҡоралында рухлы профессионал уйнай, унып өсөн йөҙ ҡыҙармаясаҡ.

Роберт ҡурайҙа уйнағанда нимәләр кисереүен әйтмәһә лә, башҡаларҙың кисерешенә битараф түгел. "Әгәр тамашасы минең уйнағанды тыңлап, ниндәйҙер тәрән тойғолар кисерҙем, ти икән — был минең өсөн иң юғары баһа!" — ти ул. Эйе, ҡурай моңон тыңлап, йән әрнеткес кисерештәргә дусар булыусылар ҙа юҡ түгел. Сөнки борон-борондан ҡурай юғары илаһи көс менән бәйләнеш ысулы ла һаналған. Юҡҡа ғынамы ни атаҡлы ҡурайсылар ҙа иң ауыр мәлдәрендә, йән ғазаптарына дусар булған минуттарында ҡулына ҡурай алған. Сөнки был илаһи моң кеше рухын сафландыра, таҙарта. Роберттың бер сығышы мәлендә өлкән йәштәге ир кешенең күҙ йәштәренә быуылып залдан сығып барғанын күреп, артынан эйәрҙем. Ғүмер буйы судья булып эшләгән, Екатеринбург ҡалаһынан килгән ир: "Мне показалось, что в звуке этого инструмента слышен голос Бога... У меня внутри все перевернулось..." — тине һәм, әйтерһең, уйҙары менән әллә ҡайҙарға ашыҡты. Тетрәндерерлек һүҙҙәр әйткән ир уҙаманы, бәлки, яңғыҙы ҡалып, күңелен бушатырға теләгәндер. Уға өҫтәп бер ни ҙә әйтеп булмай. Ошо миҫал үҙе генә ҡурайҙың илаһи көсө, башҡарыусының оҫталығы хаҡында һөйләй түгелме?!

Нисек кенә сәйер тойолмаһын, Робертҡа, үҙе әйтеүенсә, Башҡортостандан ситтә сығыш яһауы еңелерәк. Сөнки ситтәгеләр ҡурайға юғары кимәлдәге, камил музыка ҡоралы, моң эйәһе, тип ҡарай. Ә беҙҙә ҡурайҙы примитив тип ҡабул итеү, хатта ихтирамһыҙ ҡараш тойола. Был күренеште Роберт республикабыҙҙа аҫаба халыҡҡа ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәт тәьмин ителмәүе менән аңлата. Әммә, нисек кенә аудитория ҡабул итергә теләмәгәндәй булһа ла, ҡурай һәм башҡарыусы тәбиғи моңо менән, күрәһең, шул тиклем арбай, хатта залдағылар ҡасан ҡул саба башлағанын да һиҙмәй ҡала. Ошо урында йәнә шуны ла әйтеп үтке килә: Роберт ҡурайҙа уйнағанда мотлаҡ боронғо милли кейемдә генә сыҡмай. Ул заманса, стилләштерелеп тегелгән милли кейеме менән дә иғтибарҙы йәлеп итә. Унып ижадына эҙләнеү, яңылыҡ хас. Унып сығышына ҡарайым да, әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Мостай ағайҙың әйткән һүҙҙәре иҫкә төшә. "Беҙ ҡасан ҡурайҙа смокинг йәиһә заманса кейем кейеп уйнаясаҡбыҙ, шунда беҙҙе таныр҆ар!" — тигәйне ул. Унып был һүҙҙәре Роберт хаҡында әйтелгән төҫлө.

Ҡурайсының башҡаларҙан айырылып торған йәнә бер яғы бар — ул ҡурайҙа башҡорт, рус, сит ил эстрада көйҙәрен дә, классик әҫәрҙәрҙе лә уйнай. Әйкәндәй, классик әҫәрҙәрҙән ул әле альбом төҙөгән. Быйыл көҙ айырым концертын тәҡдим иткәндә, ике яңы дискы менән тамашасыны ҡыуандырмаҡсы.

Алда башлаған һүҙемә яңынан әйләнеп ҡайтып, шуны өҫтәйһем килә. Ҡурай — тәбиғәттең үҙе тарафынан яратылған ғәжәйеп моң сығанағы. Роберт — тамашасыға үҙ ҡурайының моңон еткерә алған ҡурайсы. Тимәк, ул ҡурай менән уртаҡ тел тапҡан. Роберт йәш, унып моң даръяһы киң һәм сикһеҙ, ә ҡурайҙың уға ғына асаһы серҙәре, ауаздары күпме икәнен бер Хоҙай үҙе генә белә! Киләсәктә лә тетрәндереп, һиҫкәндереп торһон беҙҙе Ҡурай һәм Ҡурайсы дуэты!!!